## Ни алһам да донъянан

Селтер – селтер шишмәмдән
Сыңғырап торған йыр алдым,
Ҡояшымдан, айымдан
Мин мәңгелек нур алдым.

Шат йылмайған яҙымдан
Илаһи бер наҙ алдым,
Һандуғасым моңонан
Күңелемә саз алдым.

Сал тулкынлы һыуымдан,
Икмәгемдән тәм алдым,
Тыуып үҫкән яғымдан
Мин донъяма йәм алдым.

Тупрағыма ереккән
Ҡайынымдан һут алдым,
Ғәзиз атайсалымдан
Тормошома ҡот алдым.

Дуғаланып һуҙылған
Йәйғоромдан төҫ алдым.
Йәншишмәмә йән биргән
Ер – әсәмдән көс алдым.

Барыһын да алдым мин:
Шатлығын да, нурын да…
Әммә онотманым һис
Ни алыуым турында.

Ни алһам да донъянан,
Ҡайтарырмын бөтәһен…
Ә бөгөн мин, дәртләнеп,
Йырлай – йырлай урамын
Хеҙмәтемдең көлтәһен!..

## Яҙыусының әҫәрҙәре


1. Игебаев,А. Ҡобайырҙар: Шиғриәт /А.Игебаев // Ағиҙел. – 2010. - № 6. – 5 – 18 –се б.
2. Игебаев,А. Йәшлек йәшендәре йөрәгемдә йәшнәр ғүмергә: Шиғырҙар /А.Игебаев // Шоңкар. – 2010. - № 7. – 34 – 35 б.
3. Игебаев,А. Ҡайҙа һайрай һандуғаскай? Шиғырҙар, йырҙар, кобайырҙар, әкиәттәр, поэмалар. - Өфө: «Китап», 2010.- 480 б.
4. Игебаев,А. Йәнгүзәлем. Шиғырҙар. – Өфө: Китап, 2007. – 224 б.
5. Игебаев,А. Һайланма әҫәрҙәр: Ике томда. 2-се том: Шиғырҙар, әкиәттәр, поэмалар. - Өфө: «Китап», 2005. –400 б.
6. Игебаев,А. Яҙмыш юлкайҙары урау – урау… Әҙәби портреттар, хәтирәләр, бағышлауҙар. – Өфө: Башкортостан «Китап» нәшриәте, 2002. – 256 б.





Башкортостан Республикаһы
Бөрө муниципаль районының
муниципаль бюджет мәҙәниәт учреждениеһы
биләмә-ара китапхана системаһы
Үҙәк биләмә-ара китапхана


# Абдулхаҡ Игебаев



**(1930 - 2016)**

Бөрө

Башҡорт шағиры **Игебаев Абдулхаҡ Хажмөхәммәт** улы 1930 йылдың 2 июлендә **Баймак районының Күсей ауылында** тыуған.

1950- К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлаған. 1950–69 «Совет Башҡортостаны», «Ҡыҙыл таң» гәзиттәре, «Ағиҙел» журналы редакцияларында әҙәби хеҙмәткәр булып эшләгән. 1969 – 71 Мәскәүҙә М.Горький исемендәге Институт эргәһендәге Юғары әҙәбиәт курстарында укый. 1971 – 90 «Ағиҙел» журналы редакцияһында поэзия бүлеге мөдире. Тәүге шиғырҙары республика матбуғатында 1948 баҫылып сыға. «Ирәндек бөркөтө» (1959), «Оран һала Ер – әсә» (1966 – 67), «Урал тауышы» (1969) исемле поэмалар, шулай ук популяр йырҙар авторы. Ғәлимов Сәләм, Салават Юлаев исемендәге Дәүләт премиялары лауреаты, С.Юлаев ордены кавалеры, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы нигеҙендә 2010 йылда шағир Игебаев Абдулхаҡ Хажмөхәммәт улына «Башҡортостан Республикаһының халык шағире» тигән мактаулы исем бирелде.

## Башҡортостан

Ҡырлас тауҙар иле Башҡортостан –
Ата – бабаларҙың баш йорто,
Баш йорткайын яклап яуға сапкан
Күк Уралдың кыйыу башкорто.
Башҡортостан – беҙҙең азатлыктың,
Берҙәмлектең ныклы калканы,
Уралдағы барлык милләттәргә
Һин атайсал, дуслык Ватаны.
Сал бөркөттәр оскан Башҡортостан
Салауаттай ирҙәр төйәге,
Нисә быуын яугир ҡаһармандар
Рәсәйемдең булды терәге.
Мең ғазаптар йоткан Башҡортостан
Ҡанһырап та баккан ергенәм,
Ни күрһәң дә, ниҙәр кисерһәң дә,
Бөгөлмә һин, Тыуған илгенәм.
Башҡортостан – беҙҙең азатлыктың,
Берҙәмлектең ныклы калканы,
Уралдағы барлык милләттәргә
Һин атайсал, дуслык Ватаны!



## Тыуған ер – алтын бишек

Далаларҙан искән һыҙма елгә
Ҡыштыр – ҡыштыр итә ак кылған,
Бураҙналар ярып һабан һөргән
Тыуған еренән һуң кем туйған?
Тәпәш кенә билән итәгенән
Тек – тек басып килә бер болан,
Ялан-ҡыр ҡыҙырып көтөү көткән
Тыуған еренән һуң кем туйған?
Көмөш кенә һыулы алкын йылға
Йәйрәп, ярһып аға уйһыуҙан,
Бала сактан алтын бишек булған
Тыуған еренән һуң кем туйған?
Сут – сут итеп һайрар өсөн микән
Күк тирәккәйҙәргә кош кунған,
Янып һөйгән, йәндәй якын күргән
Тыуған еренән һуң кем туйған?

1962

## Һай, тыуған ер, ғәзиз ер!

Һай, тыуған ер, ғәзиз ер,
Ата-бабам баккан ер,
Тәүге һулыш алғас та
Бәхет таңым атҡан ер!
Һай, йәмле ер, аҫыл ер,
Йәшел хәтфә япкан ер,
Ғәмһеҙ бала сағымдың
Буҙ толпары сапкан ер,
Һай, сыуаҡ ер, йомарт ер,
Үҙ моңомдо тапкан ер,
Һүнмәҫ мөхәббәтемдең
Йәйғорҙары калкқан ер!
Һай, шанлы ер, данлы ер,
Тормош ҡотом артҡан ер.
Ғүмеркәйем буйына
Кү ңелемде тартҡан ер!